Рәсәй федерацияһының мәғариф министерствоһы Башҡортостан республикаһы мәғариф министерствоһы Муниципаль Дыуан районы Мәғариф бүлеге МБОУ гимназия

# Бейеүле- таҡмаҡлы уйындар

## Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса ғилми-тикшеренеү эше

Эште башҡарыусы:
МБОУ гимназияһының
8а синыфы уҡыусыһы
Кәлимуллина Алина һәм
Терентьева Эльза

Ғилми етәксеһе:
Байышева Айгөл Ғалимйән ҡыҙы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Мәсәғут

Инеш

Киске уйын. Кемдәрҙең генә күңелендә уйылып ҡалмай икән йәш саҡтағы киске уйындар. Әлбиттә, ул бит, һәр кешенең ғүмерендә йәшлек хәтирәләренә килтереп бәйләүсе киске уйындар. Күпме яҙмыштарҙы хәл итеүсе, күпме йөрәктәрҙе берләштереүсе бейеү, йыр, таҡмаҡтарға бай уйындар. Күпме генә ғүмер үтмәһен дә, күпме һыуҙар аҡмаһын, кеше ниндәй генә заманда йәшәмәһен, уны һәр ваҡыт йыр, бейеү оҙатып йөрөй. Кеше ниндәй генә оялсан, ниндәй генә баҫалҡы булмаһын, күңелендә унының йыр, бейеүгә ынтылыш йәшәй. Сөнки беҙ барыбыҙ ҙа тәбиғәт балалары. Ә тәбиғәт үҙе үк йыр, моң һәм ритм.

Башҡорт,татар халҡы элек-электән йыр-бейеүгә әүәҫ булған. Тәбиғәт ҡосағында ҡунаҡ ҡаршылап, күңел асып йәшәгән халыҡтың йола-байрамдары ла бик күп булған. Ә хәҙергә көндә татар, башҡорт исемен йөрөткән апай, ағайҙарҙың, ата-әсәләрҙең күбеһе үҙ телендә йырлап, үҙҙәренсә бейеү түгел, хатта тыпырлап парлап өйөрөлөргә лә белмәүҙәре күңелде ҡыра. Был күренеште күҙәтеү оят та, ҡыҙғаныс та.

Үҫеп килгән беҙҙең йәш быуынды нимә көтә? Ниндәй генә "шәп" булмаһын сит ил көйҙәре сит инде…

Шулай итеп, киске уйындарҙы тергеҙергә кәрәк тигән һығымтаға киленде.

<u>Тикшереү объекты</u>- оло йәштәге әбей-бабайҙарҙан бейеүле-таҡмаҡлы уйындарҙы өйрәнеү.

<u>Тикшереү предметы</u>- бейеүле-таҡмаҡлы уйындар.

<u>Маҡсаттар</u>: - бейеүле-таҡмаҡлы уйындарҙы өйрәнеү;

- бер системаға һалып ғилми эш итеп яҙыу;
- бер төркөм менән был уйындарҙы өйрәнеп ҡарау;
- башҡаларға таратыу;
-

Бурыстар:- йыйылған материалды анализлау;

- мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн асыҡлау;
- башҡаларға таҡмаҡ йырларға, бейергә өйрәтеү;
- эштең мөһимлеген башҡалар аңына еткереү.

Тикшеренеү методтары:

-күҙәтеү;
-интервью;
-анкета;
-эксперемент(тәжрибә);

Тикшеренеү этаптары:

-сығанаҡтарға байҡау яһау;
-оло йәштәге кешеләрҙән мәғлүмәт туплау;
-клуб мөдирҙәре, уҡытыусылар менән әңгәмәләшеү;
-уҡыусылар һәм олораҡ йәштәге кешеләр араһында анкета үткәреү;
- уҡыусылар менән таҡмаҡ, бейеү, уйындарҙы өйрәнеп ҡарау;
-мәғлүмәттәрҙе бер системаға һалыу, эште яҙыу;
-эште яҡлау һәм башҡалар менән уртаҡлашыу.

## Бейеү таҡмаҡтары.

Бейеүле- таҡмаҡлы уйындар бөгөнгө көндә юғалып, онотолоп барыу өҫтөндә. Быны белеүсе, өйрәтеүсе кешеләрҙең һирәгәйеүҙәренән тыш , был мәғлүмməттәрҙе йыйыусы, өйрәтеп таратыусы, йәки китап итеп баҫтырыусылар ҙа юҡ кимәлендә. Булған мәғлүмәттәр ҙә тулы көйөнсә яҡтыртылмаған. Хатта гәзит , журналдарҙы ҡарап сығып бындай мәғлүмәттәр табылманы тиерлек. Йыр китаптарында бер нисә таҡмаҡ бирелгән, улары ла инде элекке таҡмаҡтар рәтенә индереп булмауы асыҡланды.Мәҫәлән:анкета тикшереүе буйынса,

Иҙәнегеҙ тигеҙ икән,
Фанер йәйҙегеҙме әллә?
Килдегеҙ ҙә ултырҙығыҙ,
Тамыр йәйҙегеҙме әллә?

таҡмағы 55% кешегә таныш булып сыҡты. Тимәк, олатай-өләсәйҙәр йырлап үҫкән төртмәле таҡмаҡтар таратылмай. Кешеләр барыһына ла таныш бер-нисә таҡмаҡ менән генә сикләнгән.

Бейеүҙәр һәр ваҡыт тиерлек таҡмаҡтар менән оҙатылылып килер булған, тип һөйләйҙәр олораҡ быуын кешеләре. Менәүәрә әбей һөйләүенсә, элекке таҡмаҡтар күпкә ҡыҙығыраҡ та, тормошсан да, төртмәле лә булған. Бына мәҫәлән уларҙың бер-нисәһен генә алып ҡарайыҡ.

Һин дә әллә кем түгел,
Мин дә әллә кем түгел.
Һинең әллә кем булыуың
Әжәлгә дарыу түгел.

Ағиҙелдән ағып килә
Түәлиттең таҡтаһы.
Һөйгәнеңде күрҙем инде,
Ағып тора маңҡаһы.

Иҫке шырпы ҡабы,
Яңы шырпы ҡабы.
Аяғында кеше ойоғо,

Тишеп ҡуйма кабы.

“Был таҡмаҡты беҙҙә бына былайыраҡ итеп йырлай торғайнылар”- тип, һүҙгә ҡушыла Саниә әбей.

Иҫке шырпы ҡабы,
Яңы шырпы ҡабы.
Төш тә бейе, төш тә бейе,
Таҡмаҡ әйтербеҙ тағы.

Бейеүсенең итәктәре
Бейей-бейей ҡыҫкара.
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ,
Бейей- бейей оҫтара.

Алмағастың алына,
Был-был ҡунһын талына.
Егет алһын, ҡыҙы барһын
Үҙе һөйгән ярына.

Эй, туғандар, килдегеҙ ҙә
Иҫәнләшә белдегеҙ.
Мәктең ал сәскәһе кеүек,
Күҙемә күрендегеҙ.

“Беҙҙе, элек бик оҙаҡка урманға эшкә ебәрәләр ине. Йәш кенә ҡыҙҙарбыҙ, эш ауыр, ауылыбыҙ бик йыраҡ,һағындыра. Йырлап-бейеп күңел аса торғайныҡ. Бына шундайыраҡ таҡмаҡтары ла иҫтә калған әле:

Берәү, икәү, өсәү,дүртәү.
Беҙ баракта ятабыҙ.
Телеграмма бағанаһы
Сәскә аткас ҡайтабыҙ.”-

тип хәтирәләре менән бүлеште Менәүәрә әбей.

Ысынлап та, боронғо таҡмаҡтар төртмәле һүҙҙәр ҡулланырға ла, бейеүсене дәртләндереп ебәрергә лә, таҡмаҡ аша хис-тойғоларын белдерергә лә өлгәшкән. Был таҡмаҡтар күңелһеҙҙең күңелен күтәрер, көлмәгәнде көлдөрөр, һауалылыларҙы уйландырыр кимәлдә. Таҡмаҡ бейеүле-уйындарҙа ҙур роль уйнаған.

# Бейеүле-таҡмаҡлы уйындар

Бейеүле – таҡмаҡлы уйындар, ғәҙәттә, дәртле, көслө темперамент менән етеҙ башҡарылған, төҙөлөшө яғынан улар ике төп өлөштән торған: уйнаусылар башта төртмәле таҡмаҡтар йырлап ҡара ҡаршы бейегәндәр, түңәрәк буйынса әйләнеп , төрлө бейеү фигуралары яһағандар, икенсе өлөшөндә тыпырлап бейеүгә күскәндәр.

Бейеүле- таҡмаҡлы уй ындарҙа иң киң таралған бейеү хәрәкәттәре: **төп йөрөш** һәм **тыпырлау.**

## Төп йөрөш

Хәрәкәт башланыр алдынан ике аяҡ бергә тора. “Бер” тигәндә, уң аяҡты алға сығарарырға. “Ике” тигәндә, уң аяҡ менән алға атларға һәм һул аяҡты артҡа күтәрергә. “Өс” тигәндә, һул аяҡтың осо менән иҙәнгә бәреп алырға. “Дүрт” тигәндә, уң аяҡтан алға атларға һәм һул аяҡты күтәреңкерәргә. “Биш” тигәндә, һул аяҡты алға сығарырға.

Артабан был хәрәкәт һул аяҡтан башлап үтәлә.

Ҡулдар йөрөшө: уң аяҡтан атлағанда һул ҡул алда, терһәктән бөгөлә, уң ҡул артҡа ҡарай бөгөлә; һул аяҡтан атлағанда- киреһенсә. Баш һәр ваҡыт алға ҡарай.

## Еңел йөрөш

Был хәрәкәт “төп йөрөш” кеүек, тик аяҡ остарына баҫып алға ынтылыбыраҡ башҡарыла.

## Тыпырлау

Был хәрәкәт башҡорт бейеүҙәрендә иң матур хәрәкәттәренең береһе. Бейер алдынан аяҡтар бергә тора.

“Бер” тигәндә, уң аяҡтың табанын, үксә иҙәнгә тейгән килеш, бер аҙ күтәрергә; “ике”-табан менән иҙәнгә һуғып , уң аяҡҡа баҫырға һәм шунда уҡ һул аяҡты саҡ ҡына күтәреп, ҡапыл иҙәнгә баҫырға ла уң аяҡты күтәрергә; “өс”- уң аяҡ менән иҙәнгә баҫырға, һул аяҡты күтәрергә; “дүрт”- һул аяҡ менән иҙәнгә баҫырға, уң аяҡты күтәтергә; “биш”- уң аяҡ менән иҙәнгә баҫырға. Тыпырлау ваҡытында ҡулдарҙы бөйөргә таянырға мөмкин.

# Оло инәйҙәрҙән интервью

-Оло инәйҙәр, әйҙәгеҙ бөгөн бергәләп һеҙҙең йәшлегегеҙгә ҡайтып киләйек! Беҙҙе бигерәк тә киске уйындар, бейеүле-таҡмаҡлы парлы бейеүҙәр ҡыҙыҡһындыра. Иҫләйһегеҙме?

- Иҫләмәгән ҡайҙа ул, ҡыҙым! Ниндәй шәп, күңелле, йәш саҡтар. Онотторлоҡ түгел( әкрен генә йәнләнеп китәләр).

- Хәҙер клуб, мәҙәниәт йорто бар, ә һеҙ был уйындарҙы ҡайҙа уйнай торғайнығыҙ?

- Иң мөһиме күңелдәге дәрттер ул, ҡыҙым. Беҙ үҫкәндә ауылда клуб-маҙар юҡ ине, ләкин форсаты тейгән һайын киске уйынға йыйыла инек. Ауылда бер барак һымаҡ йорт буш тора ине шунда егеттәр гармун уйнай башланымы, ҡыҙҙар әкренләп йыйыла инек.
- Ә мине атайым сығармай торғайны. Гармун тауыштарын ишетеп ,эй сығаһы килә ине… Атайым менән әсәйем йоҡлап киткәс урыныма кеше эшләйем дә тәҙрәнән сығып уйнап ҡайта инем.
- Мин һинән хәйләкәрерәк булғам инде күрәһең. Ишектең киләһен тыштан асырға сыбыҡ әҙерләп ҡуя торған инем. Үҙем атайымдан шул тиклем ҡурҡам, мин булмағанда, тороп башты тотоп ҡарар тип, ә сығаһы килә.
- Мин һеҙҙән олораҡ булғас, беҙҙә улай булмай торған ине. Ҡыҙҙар менән аулаҡ өйгә йыйылдыҡмы, егеттәр әллә ҡайҙан беләләр, килә һалып етәләр. Ҡыҙҙар менән тауға сыҡтыҡмы, тағы егеттәр һиҙеп ҡалалар. Үҙебеҙгә үҙебеҙ таҡмаҡ әйтешеп йырлап-бейеп күңел аса торған инек.
-
- Был бейеүҙәрҙән нимәләр иҫегеҙҙә ҡалған?
-
- Һәр ваҡыт бер кешене заводила-башлыҡ итеп ҡуя торғайныҡ һәм ниңәлер гел генә русса белгән кешене

һайлап ҡуялар һәм ул русса командалар бирергә тырыша ине.

- Беҙ шул тиклем күмәк була торғайнык, ҡайһында 20-гә яҡын пар булып китә инек. Егеттәр етмәһә, ҡыҙҙар егеттәр урынына баҫалар, сөнки барыһының да бейеһе килә бит инде.

# Уйын барышы

Сәхнә йәйге ялан рәүешендә биҙәлгән. Йәйге күлдәктәрҙә генә ҡыҙҙар яңы бешкән еләк тәмләргә сыҡҡан. Күтәренке күңел менән көләшә-көләшә еләк эҙләп ҡабалар.

- Әй , тәмле лә еләге!
- Телеңде йоторлоҡ!
- Мин берҙә таба алмайым да ул. Әй таптым,таптым!
- оҙаҡламай еләккә йөрөй башлаясаҡбыҙ!

Бер ҡыҙ еләк ашауынан туҡтап, ҡоштар һайрауын тыңлап тора.

-Ҡыҙҙар, ишетәһегеҙме? Һандуғастар һайраша! Әллә беҙҙә һайрашып алабыҙмы?

-Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ!

Ҡыҙҙар таҡмаҡ әйтеп, урындарында бейей башлайҙар. Гармунсы гармунда таҡмаҡ көйө уйнай.

Өй артында баҡсала  
Һин тирәк булһаң ине.  
Шул тирәктең төптәрендә  
Мин еләк булһам ине.

Бер ҡыҙ уртаға сығып туҡтата.

-Туҡтағыҙ, туҡтағыҙ ҡыҙҙар! Улай булмай! Мин генә йырлайым әле!

Икенсеһе ҡаршы төшә.

-Ни эшләп һин генә ти!? Минең дә тауышым матур.

Өсөнсөһө ҡушыла.

-Минең дә йырлағым килә.

-Ярай улайһа, бергә йырлайыҡ.

Алма баҡсаһына кереп,  
Алма ашағым килә.  
Һин алмаһы , мин сәскәһе  
Булып йәшәгем килә

Яланға бер егет килеп сыға, ҡыҙҙар күрмәй ҡала. Ул сығып егеттәрҙе саҡыра.

-Егеттәр! Килегеҙ әле, килегеҙ! Ҡыҙҙар тауға сыҡҡандар.

Ҡыҙҙар сәрелдәшеп, оялып ситкә китәләр. Гармун уйнап, таҡмаҡ йырлап егеттәр инә.

Алмалар алыр инем,  
Хөрмәләр алыр инем.  
Бер һөйләшеп алыр өсөн  
Янына барыр инем.

Ҡыҙҙар : -эй, йырлаған булалар тағы.  
-Йырлай ҙа белмәйҙәр әле.  
-беҙҙең бындалыҡты ҡайҙан белгәндәр тағы?

Егеттәр: һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар! Еләк тәмлеме?

Ҡыҙҙар: Еләк тә булһын, тәмле лә булмаһын имеш.

Егет: ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ уйын уйнап алайыҡ!

Ҡыҙҙар бергәләп: әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ!

Гөлкәй: “Аҡ тирәк күк тирәк”те уйнайыҡ.
Алһыу: “Плен алыш”
Зөһрә: “Косилка- молотилка”.
Зәйнәб: “Юҡ, юҡ. әйҙәгеҙ “Сылбыр” уйнайыҡ.
Вәлит :Юҡҡа бәхәсләшмәгеҙ әле, “Һайлаш” уйынын уйнайыҡ.
Ҡыҙҙар: Әйҙәгеҙ. әйҙәгеҙ. Еңелһәгеҙ үпкәләмәгеҙ.



Егеттәр ҡыҙҙарға , ҡыҙҙар егеттәргә ҡара ҡаршы таҡмаҡ әйтешеп киләләр. Ҡайһы яҡ таҡмаҡ әйтеүҙән туҡтай, шулар еңелә .

Һаумыһығыҙ, иптәштәр!
Нисек бара һуң эштәр?
Ауырымайһығыҙмы?
Исән тораһығыҙмы?

Һаулыҡ һорап торған була.
Лыҫтыр ғына бит әле.
Күрмәгәнеңде күрерһең,
Беҙҙең яндан кит әле.

Телләшмәгеҙ иптәштәр,
Һүҙ табырбыҙ һөйләргә.
Улай итеп, былай итеп,
Кәрәк эште көйләргә.

Улай итеп ни файҙа,
Былай итеп ни файҙа.
Көсөң етеп ала алмағас,
Һөйләшеүҙән ни файҙа.

Егеттәр ҡулдарын ташлап: -Эй, булманы инде. Һеҙҙе уҙып булмай.
Ҡыҙҙар һауаланып ҡына: Эйе, шул!
-Ҡайҙа инде беҙгә етәргә!
Уйынды башлап йөрөүсе Зөһрә: Ҡыҙҙар, егеттәр, әйҙәгеҙ “Вечер” уйнап алайыҡ.
Рәйлә менән алһыу ҡумыҙ сиртә. Мансур думбырала, ә Солтан гармунда уйнай . Ҡалғандар парлашып өйөрөлөп бейейҙәр. уйынды башлап йөрөүсе ҡыҙ таҡмаҡ әйтеп тора.

Егеттәре килгәндәр,

Ишек асып ингәндәр.
Беҙҙең уйынға сыҡҡанды
Әллә ҡайҙан белгәндәр.

Иван булһа ни була,
Диван булһа ни була
Һикереп төшөп бейегәнсе,
Йыуан булһа ни була.

Гармун уйнаусы егет: Юҡҡа саң туҙҙырмағыҙ әле.
Думбыра уйнаусы Мансур бер биҙрә һыу килтереп һибеп ебәрә. ҡыҙҙар сырылдап ситкә һикерәләр.
 Бер егет уртаға сығып: Саң да баҫылды, әллә “Ритаим”ды уйнап алабыҙмы?
Бергәләп: Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ!
Ҡыҙҙар : Башлап йөрөүсе – Зөһрә,
Ул бит русса шәп белә.
Зөһрә: ярай. һеҙҙеңсә булһын. “Ритаим”!

**Парлы бейеү-уйыны- “Ритаим”.**

1.Ҡыҙҙар менән егеттәр ҡара –ҡаршы торалар. Тыпырлап барып бер-береһенә баш эйәләр, ҙә урындарына баҫалар. Урындағы ҡулдар хәрәкәте ус сабыуҙы хәтерләтә.




2.Еңел йөрөш менән урап килеп парҙар уртала осрашалар һәм ҡулға ҡул тотоношоп алға киләләр.



3Уйынды башлап йөрөүсе “Наза”, тип команда бирә. Парҙар ҡул аҫтынан сыға башлайҙар. Беренсе пар алға килеп сыҡҡансы тыпырлап дауам ителә.
4“Парами” командаһы бирелә. Парҙар бер-береһенең беләгенән тотоп ҡулдарын алмаш- тилмәш бер төшөрөп. бер мендереп урында әйләнәләр. “Обратно” командаһына кире яҡҡа әйләнә башлайҙар.
5“ Шахмат” командаһына парҙар етәкләшеп бер береһенә ҡарап баҫа һәм шахмат тәртибе буйынса артка бейеп китәләр. “Обратно” командаһына кире урындарына баҫалар.



6. “назад” командаһына барыҙы ла артка китә һәм ситкә барып төҙөләләр.



7. “своей парой” командаһына сылбыр буйынса үҙ пары менән генә әйләнеп кире урынына торалар.




8“За пары” тигәндән һуң егеттәр үҙ парын барып алып түңәрәк буйлап урап килеп уртаға баҫалар.
9“На свои места” командаһынан һуң парҙар артка бейеп китеп урындарына баҫалар.

10“Две пары” командаһына ике пар уртала осраша һәм ҡулдарын уртаға һоноп түңәрәк эшләп башта уң яҡҡа. Һуңынан һул яҡҡа әйләнәләр.Аҙаҡ ҡултыҡлашып ҡаршыһына тура килгәне менән өйөрөләләр. Артабан ҡалған ике пар шулай уҡ.




11“За пары” командаһына егеттәр үҙ парҙарын алып тағы түңәрәкте урап килеп уртаға баҫалар. “на свои места” командаһына артҡа китәләр.

12“Три пары”, Четыре пары” командалары үрҙәге әйтелгән”две пары” кеүек башҡарыла.”
13“Крест на крест на пару” командаһы буйынса ике яҡ ситтә торған ҡыҙ менән егет парлап әйләнә. Артабан шул тәртип буйынса дауам итеlә.



14“За пары” командаһынан һуң “Круг” командаһы бирелә, ҙур түңәрәк эшләп баҫалар.
15Әҙерәк етәкләшеп әйләнгәндән һуң “Егеттәр тышта , беҙ эстә” тиеүгә, ҡыҙҙар эскә кереп уң яҡҡа әйләнә башлайҙар,егеттәр һулға.



16“Егеттәр эстә,беҙ тышта” командаһына урындарын алышып бейейҙәр.
17“Вместе” командаһына ҙур түңәрәк эшләйҙәр һәм шунда уҡ “Руки за плечо” командаһы яңғырай. Уң ҡулдарын һул иң башы аша биреп арттағы кеше менән етәкләшәләр һәм шул көйөнсә бейейҙәр. “Обратно” командаһына ҡулдарҙы алышып тотоп кире яҡҡа әйләнәләр.
18“За пары”, командаһы үрҙә әйтелгәнсә үтәлә.
19Парҙар урап килеп “наза”лағы кеүек баҫа. Бер –береһенә әйләнеп тороп итәкләшәләр. Түбәндәге тәртип буйынса парҙар бер – береһенең араһынан сыға башлайҙар.



20“Зиг-загом” командаһы сылбыр буйынса бара.Егет башлап ҡыҙға килтереп баҫа, икәүләп өйөрөлгәндән һуң, ҡыҙ икенсе егеткә килтереп баҫа, шулай сылбыр түбәндәге тәртип буйынса дауам итә. Өйөрөлөүҙе бер яҡҡа ғына алырға мөмкин.



21.Парҙар ике яҡҡа китеп алға барып теҙеләләр һәм йырлап баш эйәләр.

Һеҙҙә тула баҫалармы?
Беҙҙә тула баҫалар.
Һеҙҙә нисек, беҙҙә шулай
Уйнап күңел асалар.



# Мәғлүмәттәр алынды

1. Ғәлләмова Фатима Кәбир ҡыҙы. (1936й)
   Дыуан р-ны, Мәсәғүт ауылы, Ҡыҙыл яр урамы, 28йорт.

2. Бәҙретдинова Менәүәрә Зәйнетдин ҡыҙы. ( 1929й.)
   Дыуан р-ны, Мәсәғүт ауылы, Дауахана урамы, 33 йорт.

3. Дилмөхәмәтова Сания Йәрмөхәмәт ҡыҙы. ( 1930й.)
   Дыуан районы, Мәсәғүт ауылы, Авиациа урамы, 23 йорт.

4. Ибатуллина Нәсимә Кәбирйән ҡыҙы. (1945й.)
   Дыуан р-ны, Мәсәғүт ауылы.

5. Шәрәфетдинова Рәхимә Йәрмөхәмәт ҡыҙы. (1937й.)
   Дыуан р-ны, Мәсәғүт ауылы, Габов урамы, 2 йорт.